# Бөйөк Еңеүгә - 70 йыл.

***Сценарий торжественного митинга, посвящённого открытию памятника в д.Максютово МР Стерлитамакский район РБ***

***Дата проведения: 9мая 2015г.***

***Составила зам директора по ВР Алимбаева Ф.Р.***

**Звучит мелодия «Рио-Рита».**

На танцплощадке танцуют нарядно одетые молодые люди (три пары), они тихо беседуют, смеются. На лицах — выражение безмятежной радости, в глазах — счастливый блеск. **Мелодия внезапно обрывается, сменяясь нарастающим воем авиабомб, разрывом снарядов.** Девушки в ужасе закрывают головы руками. Юноши пытаются заслонить их от страшных ударов. Все разбегаются.

**За сценой голос диктора радио:**

22 июня в 4 часа утра без объявления войны гитлеровская Германия вероломно нарушила границы Союза Советских Социалистических республик…

**Звучит песня В. Лебедева-Кумача «Священная война» (1куплет, фонограмма):**

Вставай страна огромная,
Вставай на смертный бой,
С фашистской силой темною,
С проклятою ордой!

**Ике алып барыусы сыға.**

***ВЕДУЩИЙ 1. Ишемгулова Х.А.:***

22 июнь 1941 йыл. Таң атып килә. Ауылдар, ҡалалар йоҡоға талған. Тәмле төштәр күреп балалар йоҡлай. Ҡапыл, бөтә доньяны ҡурҡыныс бомба тауыштары баҫа… Немец фашистары беҙҙең илебеҙгә ут асалар…

Һуғыш! Биш кенә хәрефтән торған был һүҙҙә мәңге уңалмаҫ ер яраһы, күңел яраһы, ватылған-емерелгән яҙмыш, өҙөлгән ғүмер, яралы мөхәббәт, етемлек…

Ҡот осҡос һуғыш 1418 көн дауам итә… Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында 34 млн. 477 мең кеше һалдат шинелен кейҙе. Башҡортостан егеттәре-ҡыҙҙары ла яуҙа һынатманы. Башҡортостандан һуғышҡа 704 мең 448 кеше киткән. Тыуған ил азатлығы өсөн республиканан бөтәһе 297 мең 979 яугир башын һалған …

Тыуған төйәгебеҙҙе нурлап 1945 йылдың яҙы килде. Был көндө беҙгә ата-бабаларыбыҙ фашизмды тар-мар итеп, еребеҙгә йәшәүҙең үҙен ҡайтарҙы. Кешелек тарихындағы ҡанҡойғос ҡәһәрле һуғыш 9 Май көндө Совет иленең еңеүе менән тамамланды. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының ҡаһарманлығы әллә күпме тиҫтәләгән йылдар уҙыуға ҡарамаҫтан, әле лә һоҡландыра, ғәжәпләндерә. Һоҡландыра – улар илде һаҡлау өсөн йәнен дә, тәнен дә аямаған, ғәжәпләндерә – был тиклем дә рухты, көстө ҡайҙан алғандар икән?

Эйе…70-се тапҡыр илебеҙгә яңы һулыш, яңы көс-ҡеүәт, шатлыҡ менән Еңеү байрамы килде.

Беҙ бөгөн хөрмәтле ветерандарыбыҙға доньяға йәм биреп йәшәүҙәре өсөн рәхмәт әйтергә, тыуған илебеҙгә Бөйөк Еңеү бүләк иткән ҡаһармандарҙың батырлығын иҫкә алырға. уларҙың алдында баш эйергә йыйналдык .

***ВЕДУЩИЙ 2. Ишимбаев К.Г.:***

Добрый день, дорогие ветераны Великой Отечественной войны, труженики тыла, уважаемые гости, дорогие ребята – наследники Великой Победы!

Сегодня вся страна торжественно отмечает всенародный юбилей – 70-летие Великой Победы над фашистской Германией. Прошло 70 лет, как закончилась Великая Отечественная война. Дорогой ценой досталась нашему народу Победа: 4 года войны, 1418 дней и 34 тысячи часов беспримерного народного подвига, 1418 дней крови и смертей, боли и горечи утрат, гибели лучших сыновей и дочерей России, 20 миллионов погибших людей!

Майские дни 1945 года вошли незабываемой страницей в историю человечества. День 9 Мая стал символом самоотверженности и мужества, искренней любви к Родине. Под ударами Красной Армии рухнул гитлеровский фашизм, несший народам Европы рабство. Победа над врагом стоила советским людям огромных жертв и лишений, была добыта волей солдата, его несгибаемым духом, его кровью. Советский воин умел смело смотреть в глаза смертельной опасности, проявляя при этом боевую доблесть и героизм.

В годы Великой Отечественной войны наши земляки вместе со всем советским народом, не щадя жизни, защищали честь и независимость страны, внесли достойный вклад в победу над фашизмом.

Каждый из нас должен помнить, что мы сегодня живём за тех, кто остался лежать на полях сражений, за тех, кто бился с жестоким врагом до последней капли крови в незабываемые огненные дни 1941 – 1945 годов.

Сегодня у жителей села Максютово два знаменательных события: День Победы и открытие мемориальной доски (или обелиска?) в память наших отцов и дедов – участников Великой Отечественной войны 1941-1945гг.

**Разрешите митинг, посвященный 70-летней годовщине Великой Победы и открытию мемориальной доски в память о наших земляках - участниках войны считать открытым.**

**Звучит ГИМН РФ**.

***ВЕДУЩИЙ 1. Ишемгулова Х.А.:***

Хөрмәтле Бөйәк Ватан һуыышы ветерандары һәм тыл хеҙмәтсәндәре! ҡәҙерле яҡташтар! Бөтә халыҡ байрамы – Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы айҡанлы ихлас ҡотлайбыҙ!

Бөгөн Бөйөк Еңеүгә - 70 йыл. Илдә Бөйөк Еңеүгә 70 йыл тулған осорҙа халыҡ ҡаһармандары, яу яландарында башын һалған һалдаттар, тыл хеҙмәткәрҙәре хәтергә йышыраҡ төшә, күңелдәргә һағыш өҫтәй. Һуғыш үтте, һулышы ҡалды, һәм ул ауыр яра булып халыҡ күңелендә мәңге йәшәй. Әлеге көндә һуғыш ветерандары һаны кәмегәндән-кәмей, сафтар һирәгәйә.

Һуғыш һәр бер ауылға, йортҡа, ғаиләгә, кешегә ҡағылып үтте һәм береһен дә аяманы. Әммә бар кешелек берләшеп, “Барыһы ла фронт, барыһы ла еңеү өсөн” тигән лозунгы аҫтында 4 йыл көн-төн еңеү көнөн яҡынайтыу өсөн тырышты. Беҙҙең Мәҡсүт ауылынан бөтәһе 51 ир-егет һуғышҡа алына, 18 генә тыуған

ауылына әйләнеп ҡайталар. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бөгөнгө көндә Мәксүт ауылында иҫән ҡалған бер ветеран да юҡ.

Иң дәһшәтле ҡан ҡойоштарҙың береһе – Бөйөк Ватан һуғышына күп ваҡыт үтһә лә, беҙҙең яҡташтарыбыҙҙың, дөйөм Рәсәй халҡының батырлығы онотолмай. Бөгөн, Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллыҡ байрамы көнөндә, һуғышта ҡатнашҡан ауылдаштарыбыҙҙы хөрмәтләп, яуҙа ҡорбан булған һалдаттарҙы иҫкә алып, улар алдындағы бурысыбыҙҙы үтәп, батырҙарҙы данлап, Мәксүт ауылында мемориаль таҡтаташ асыла. Яугирҙарҙың исемдәре был таҡтаташта мәңгелеккә уйылған. Беҙ генә түгел, беҙҙең киләсәк быуындарыбыҙ ҙа ата-бабаларының батырлығы, ҡаһарманлығы тураһында белергә һәм онотмаҫҡа тейеш. Ғүмерҙәрен аямай күкрәк кереп дошманға ҡаршы сыҡҡан яугирҙарыбыҙҙың исемен мәңгеләштереү - иң мөһим бурысыбыҙҙың береһе. Киләсәгебеҙ яҡты, таңдарыбыҙ ҡояшлы булһын өсөн, фашист илбаҫарҙары менән көрәшкән атай-олатайҙарыбыҙҙы ҡурсалап, хөрмәт итергә тейешбеҙ!

Обелиск асыу тантанаһына бөтә ауыл халҡы йыйылдыҡ. Һуғыш яланында ятып ҡалғандарҙы, һуғышта алған яраларҙан вафат булғандарҙы, оло йәшкә етеп гүр эйәһе булған ветерандарҙы, тылда аслыҡтан, яланғаслыҡтан яҡты донъя менән хушлашҡандарҙы хәтерҙә тотайык, уларҙың батырлығын онотмайыҡ!

***ВЕДУЩИЙ 2. Ишимбаев К.Г.:***

Великая Отечественная война прошла через каждую семью. Женщины-солдатки: матери, сестры, жены, любимые… Сколько лишений и трудов выпало на их долю в эти страшные годы войны. Ждать с войны сына, брата, мужа, получать похоронки… Но при этом растить детей, выращивать хлеб, стоять до изнеможения у станка. А многие воевали рядом с мужчинами…

И всех ждал «ослепительный май» — победный май 1945 года. Но к этому дню народ шёл трудной дорогой нечеловеческих усилий, испытаний, горя и слёз…

Сегодня всё меньше остаётся в живых тех, кто сражался за нашу Родину - ветеранов Великой Отечественной войны. Сегодня мы вспоминаем тех, кто остался на полях сражений, и тех, кто после войны налаживал мирную жизнь. Сегодня мы склоняем головы в память о павших и в благодарность участникам Великой Отечественной войны, которые своей жизнью и тяжким ратным трудом обеспечили Великую Победу над немецко-фашистскими захватчиками.

Сегодня в нашей родной деревне открывается Мемориальная доска. Это дань памяти героям Великой Отечественной войны и знак уважения их мужеству.

Памяти павших, памяти вечно молодых солдат и офицеров, оставшихся на фронтах Великой Отечественной войны, посвящается!

Славным ветеранам Великой Отечественной войны, победившим, подарившим миру жизнь и счастье – посвящается!

Право открыть Мемориальную Доску Памяти наших земляков - участников Великой Отечественной войны 1941-1945гг. предоставляется **(кому я не знаю)** и председателю Совета ветеранов сельского поселения Ашкадарский сельский совет Хуснутдиновой ФаягульМансуровне **(это я так думаю).**

**(Они снимают материал с поверхности обелиска)**

***ВЕДУЩИЙ 1. Ишемгулова Х.А.:***

**- Ҡунаҡтарҙы тәбрикләү һүҙе Ашҡаҙар ауыл советы хакимиәте башлығы Казакбаева Зилә Хәниф ҡыҙына бирелә.**

***ВЕДУЩИЙ 2. Ишимбаев К.Г.:***

**- Слово для поздравления предоставляется представителю администрации муниципального района Стерлитамакский район**

***ВЕДУЩИЙ 2. Ишимбаев К.Г.:***

**- Слово предоставляется председателю Совета ветеранов сельского поселения Ашкадарский сельский совет Хуснутдиновой Фаягуль Мансуровне.**

.

***ВЕДУЩИЙ 1. Ишемгулова Х.А.:***

Онотоу юҡ һуғыш ҡорбандарын,
Йәшәй улар йөрәк түрендә.
Тәрән хистәр беҙҙең күңелдәргә
Үрмә гөлдәр булып үрелгән.

Иҫән булған ветерандарҙы хөрмәтләргә, яуҙа ҡорбан булған һалдаттарҙы иҫтә тоторға, ҡәҙерләргә бурыслыбыҙ.

Яуҙа ҡорбан булған һәм һуғыштан һуң тыуған ерендә ауыр яраларҙан вафат булған оло яҡташтарыбыҙҙың рухын иҫкә алайыҡ.

***ВЕДУЩИЙ 2. Ишимбаев К.Г.:***

Помолчим над памятью бойцов,
Тех, кого мы больше не увидим, не услышим.
Помолчим не потому, что нам
Нечего сказать об уходящих...

Помолчим, чтобы сказать о них
Не холодным, равнодушным словом,
Чтоб они воскресли хоть на миг
Всем звучаньем голоса живого!

Пусть всё замрет в минуту эту,
Пусть даже время помолчит,
Мы помним вас, отцы и деды,
Россия, Родина вас чтит!

**Память героев почтим минутой молчания.**

***ВЕДУЩИЙ 1. Ишемгулова Х.А.:***

Ошо яҙғы матур көндәрҙә бөтә донъя ҡаһармандыҡ һәм батырлыҡ күрһәтеп, кешелектең киләсәген һаҡлаған ватандаштарыбыҙ быуынына ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә. 1945 йылдың майы алыҫайған һайын Еңеүҙең әһәмиәте һәм баһаһы ла ҙурая бара. Был иҫтәлекле дата мәңгелеккә героизм һәм фиҙаҡәрлек, иҫ киткес ҡыйыулыҡ, Ватанға сикһеҙ һөйөү символы булып ҡала. Шулай уҡ беҙ Еңеү өсөн бар көсөн һалғандарҙың– фронтты бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеүселәрҙең хеҙмәт батырлығын иҫкә алабыҙ. Яугирҙәрҙең һәм тыл хеҙмәтсәндәренең тиңһеҙ ҡаһарманлығы, фиҙаҡәр хеҙмәте,сыҙамлылығы менән Бөйөк Еңеү яуланды. Һуғыш һәр ғаиләгә ҡайғы һәм ғазап

килтерҙе,ләкин кешеләрҙең күңелендә Еңеүҙең оло шатлығы, беҙҙең яугирҙәребеҙҙең, барлыҡ Совет халҡының үлемесле көрәштә еңеп сығыуы, планетала ҡабынған ҡурҡыныс янғынды һүндерә алыуы менән ғорурланыу тойғолары мәңге һаҡланыр.

***ВЕДУЩИЙ 2. Ишимбаев К.Г.:***

Человек живёт во имя жизни,
Любит мир, и близких, и друзей,
Остаётся память у Отчизны
Из поступков, подвигов, идей.
И, неся цветы к мемориалу, -
Средь забот житейской суеты -
Верим - будут доброму началом
Символ нашей памяти - цветы!

**Уважаемые гости! Просим возложить венки и цветы к мемориальной доске.**

***ВЕДУЩИЙ 1. Ишемгулова Х.А.:***

**- Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын һәм тыл хеҙмәтсәндәрен Еңеү байрамы менән ҡотлау һүҙе Яңы Фёдоровка мәктәбе укыусыларына бирелә.**

**1.** Июнь. Клонился к вечеру закат.
И белой ночи разливалось море,
И раздавался звонкий смех ребят,
Не знающих, не ведающих горя.

**2**. Июнь. Тогда еще не знали мы,
Со школьных вечеров шагая,
Что завтра будет первый день войны,
А кончится она лишь в 45-м, в мае.

**3.** Пламя ударило в небо! — ты помнишь, Родина?
Тихо сказала: «Вставайте на помощь...» Родина.

**4.** Чтоб дойти до тебя, сорок пятый,
Сквозь лишения, боль и беду,
Уходили из детства ребята
В сорок первом, далёком году.

**5.** Ул йылдарҙы нисек онотаһың,—
Ил яҙмышы ҡылыс йөҙөндә.
Ир-егеттәр китте яу ҡырына,
Алып көсө тойоп үҙендә.
Ирҙәр китте, ҡыҙҙар илап ҡалды,
Шаулап ҡалды иген, өлгөрөп.
Баҫыу ҡапкаһына саҡлы оҙата барҙы
Йәше,ҡарты, барыһы өҙөлөп.
Ирҙәр китте, ҡыҙҙар илап ҡалды,
Илап ҡалды күпме ҡатындар.
Туйҙа кейгән күлдәктәре ҡалды,
Күпме бала ҡалды, етемдәр.

***Хор башҡарыуында «Башҡорттар китте һуғышҡа» йыры яңғырай.***

**6.** Яу ҡырында олатайҙар
Ҡанын түккән ни өсөн?
Балалары, ейәндәре
Көлөп уйнаһын өсөн
Йәлләмәгән улар көсөн!

**7.** Олатайым яугир булған,
Ул фашистарҙы ҡырған.
Шуға ла уның күкрәге
Миҙалдар менән тулған.
Яу юлдарын үтә-үтә
Берлинға барып еткән.
Батыр еңеүсе булып
Иленә ҡайтып төшкән.

**8.** Болондарҙы күмеп Майҙың
Нәфис гөлөнә,
Еңеү көнө балҡып килде
Тыуған илемә.

**9.** Туғыҙынсы Май байрамын
Изге аманат итеп,
Тапшырайыҡ киләсәккә
Тик шатлыҡ, бәхет илтеп.

**10.** Тормош ҡәҙерен белеп,
ғүмер итәйек татыу.
Ишетмәйек һис бер ваҡыт
ҡурҡыныс шартлау, атыу.
**Ҡунаҡтарҙы, йәштәрҙе, уҡыусыларҙы, сабыйҙарҙы,**

**Бергә: Бөйөк Еңеү менән ҡотлайбыҙ!**

**1.** Еще тогда нас не было на свете,
Когда гремел салют из края в край,
Солдаты, подарили вы планете
Великий Май, победный Май!

**2.** Еще тогда нас не было на свете,
Когда с победой вы домой пришли,
Солдаты Мая, слава вам навеки
От всей Земли! От всей Земли!

**3.** Благодарим, солдаты, вас
За жизнь! За детство!
За весну! За тишину!
За мирный дом! За мир, в котором мы живем!

**Хором: Благодарим! Благодарим! Благодарим!**

**4.** Сегодня праздник входит в каждый дом
И радость к людям с ним приходит следом,
Мы поздравляем вас с Великим Днём.
С днём нашей славы! С днем Победы!

**Звучит песня «День Победы» (исполняет хор «Звонкие голоса)**

**1.** Мы помним, чтим поклоном низким
Всех, кто войну не пережил.-
И тех, ушедших в обелиски,
И тех, кто вовсе без могил.

**2.** Нам нужен мир – тебе и мне,
И всем на свете детям.
И должен мирным быть рассвет,
Который завтра встретим.

**3.** Нам нужен мир – трава в росе,
Улыбчивое детство,
Нам нужен мир, прекрасный мир,
Полученный в наследство.

**4.** «НЕТ» – заявляем мы войне,
Всем злым и черным силам…
. Должна трава зеленой быть,
А небо – синим-синим!

**Звучит песня «Солнечный круг» (исполняет хор «Звонкие голоса)**

***ВЕДУЩИЙ 1. Ишемгулова Х.А.:***

Хөрмәтле ветерандарға бөгөн тыныс тормош, ныҡлы һаулыҡ, именлек теләйбеҙ. Беҙгә бәхетле киләсәк бүләк иткән батырҙарҙы онотмайыҡ. Һеҙ батырлығығыҙ менән беҙгә тыныслыҡ бүләк иттегеҙ. Тиңһеҙ ҡаһарманлыҡтарығыҙ алдында баш эйәбеҙ һәм оло рәхмәттәребеҙҙе белдерәбеҙ. Өлкән быуын Ватан һаҡсыларының: “Илебеҙ башҡа бер ҡасан да һуғыш күрмәһен!” – тигән изге теләктәре тормошҡа ашһын. Илдәр тыныс булһын, башҡа һуғыш күрмәйек! Ихлас күңелдән һеҙҙең барығыҙға ла оҙон ғүмер, ныҡлы һаулыҡ, күтәренке байрам кәйефе, бәхет һәм именлек теләйбеҙ!

Еңеү яулаусы Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына һәм тыл хеҙмәтсәндәренә мәңгелек дан! Байрам менән, ҡәҙерле дуҫтар!

***ВЕДУЩИЙ 2. Ишимбаев К.Г.:***

Торжественный митинг, посвященный 70-летней годовщине Великой Победы и открытию мемориальной доски объявляется закрытым.

**Звучит ГИМН РФ**.